# ОСКОН

Декабрь, 2018 йыл                Осҡондан ялҡын ҡабы

## *Яңы йыл килә беҙгә, шатлыҡ, бәхет һибеп ергә…*



***Ҡәҙерле дуҫтар!!!***

***Һеҙҙе етеп килгән Яңы йыл менән ҡайнар ҡотлайбыҙ! Ҡоростай ныҡлы һаулыҡ, эшегеҙҙә ҙур уңыштар, саф мөхәббәт теләйбеҙ. Яңы йыл һеҙҙең барлыҡ теләктәрегеҙҙе ысынға ашырһын! Тормошоғоҙҙо мөғжизә менән тултырһын, сағыу хис-тойғолар, тәьҫораттар бүләк итһен!***

### *Беҙҙә ҡунаҡта – Элвин Грей!!!*

“Алтынсы декабрҙә лицейыбыҙға Радик Юльякшин килә!” – тигән хәбәр йәшен тиҙлеге менән бөтә мәктәпте урап сыҡты. Һәр беребеҙҙә йөҙ төрлө һорау тыуҙы. Нимә хаҡында һорашыр икән? Яңы йырҙарын башҡарырмы? Уның менән тағы кемдәр килер? һәм башҡалар.

Бына көткән көн килеп етте. Һәр уҡыусының йөҙөндә тулҡынланыу һәм ғорурлыҡ тойғоһо. Сөнки беҙ Башҡортостандың халыҡ артисы, күптәрҙең кумиры булған Элвин Грей уҡыған лицейҙа уҡыйбыҙ. Радик ағай йылмайып килеп инде, ә беҙ уны йырлап-бейеп ҡаршы алдыҡ. Уның менән бергә “Теге өсәү” һәм “Тамыр” студияһынан “Тау-тау хәбәрҙәр” тапшырыуҙарын алып барыусылар ине.



Радик Юльякшин үҙенең ябайлығы, серле йылмайыуы менән күңелде тиҙ арала арбап ала. Шул уҡ ваҡытта ул бик иғтибарлы ла. Иң беренсе ул мәктәптә уҡыған йылдарын иҫкә алды, уҡытҡан уҡытыусылары менән аралашты, беҙҙең менән бергә йырланы, ҡурайҙа уйнаны. Күптәребеҙ афтографын алыу бәхетенә ирешке, ә аҙаҡтан иҫтәлеккә фотоға төштөк.

Киләсәктә уға ижади уңыштар, яңы үрҙәр, тоғро тамашасылар теләп ҡалабыҙ.

***Хөсәйенова Азалия, 5-се а класы уҡыусыһы.***

# Рауил Бикбаевҡа 80 йәш



Туған телем өсөн кәрәк икән –
Бар бәхетем әйҙә юҡ булһын,
Туған телем өсөн кәрәк икән –
Ауыҙымдағы телем ҡырҡылһын!

Туғанынан яҙған - ярты йәтим,
Туған теленән яҙған - мең йәтим,
Телде тоҙаҡларлыҡ ғәмһеҙлектән
Уян, халҡым, ҡуҙғал, милләтем!

Рауил Төхфәт улы Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһенең Покровка районы (хәҙерге Переволоцк районы) Үрге Ҡунаҡбай ауылында тыуған. Күрше Ғәбдрафик ауылындағы ете йыллыҡ мәктәпте, Аҡ-Болаҡ педагогия училищеһын, 1962 йылда Башҡорт дәүләт университетының филология факультетын тамамлай. Аҙаҡтан аспирантурала уҡый.

1965 йылдан башлап СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында әҙәбиәт бүлегенең ғилми хеҙмәткәре булып эшләй. Филология фәндәре докторы.

Рауил Бикбаев университетта уҡыған йылдарында яҙыша башлай. «Дала офоҡтары» тигән тәүге шиғырҙар йыйынтығы 1964 йылда донъя күрә. Шунан бирле ул ике тиҫтәгә яҡын китап сығарҙы, хәҙерге башҡорт поэзияһының кимәлен билдәләрлек күренекле шағир булып танылды. Рауил Бикбаев поэзияһында халыҡ яҙмышына бәйле проблемалар күтәрелә, заман, ил, халыҡ, киләсәк алдында яуаплылыҡ тураһында һүҙ бара. «Карауанһарай», «Баҙар балтаһы», «Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!» поэмаларында, «Халҡыма хат» шиғырында был бигерәк тә асыҡ күренә.

Рауил Бикбаев — күренекле әҙәбиәт ғалимы. Ул филология фәндәре докторы, профессор. Хәҙерге башҡорт шиғриәтенең үҫеш проблемаларына арналған күп ғилми хеҙмәттәр авторы. Уның бигерәк тә Ш. Бабич ижадын өйрәнеү, әҫәрҙәрен халыҡҡа ҡайтарыу өсөн башҡарған эштәре ҙур.

Рауил Бикбаев Башҡортостан Республикаһының Ғ. Сәләм исемендәге йәштәр премияһы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты. 1992 йылда уға «Башҡортостандың халыҡ шағиры» тигән маҡтаулы исем бирелде.

# 14 декабрь – башҡорт теле көнө.

Донъяла төрлө телдәр бик күп. Тел - кешләрҙең төп аралашыу сараһы ул. Кеше тел ярҙамында бер-береһе менән аралаша, фекер алыша, теләген белдерә, хис – тойғоларын сағылдыра. Шуға ла ата – олатайҙарыбыҙ: “Теле барҙың – көнө бар”, - тип бик дөрөҫ әйткән.

Кеше сит телдәрҙе белеп тә, үҙ телен белмәһә, мин уны:”Ярты кеше”, - тип атар инем. Сөнки туған тел ул – бөтә халыҡтар өсөн иң ҡәҙерле ҡомартҡы. Донъяла һәр кем өсөн иң ҡиммәтлеһе булып, тик туған теле булырға тейеш.

Туған телгә арнап, уның нескәлеген маҡтап ниндәй шағир шиғыр яҙмаған да, ниндәй йырсы йырламаған, ниндәй сәсән данламаған. Мәҫәлән, Рәми Ғариповтың:

“Әсәм теле миңә – сәсән теле,-
Унан башҡа минең халҡым юҡ,
Йөрәгендә халҡы булмағандың
Кеше булырға ла юҡ!”-

тип әйткән һүҙҙәрен балалар баҡсаһында уҡ ятлап, көйләп үҫтек. Минең өсөн туған башҡорт телем донъяны танып белеүҙә асҡыс булып тора. Туған телем аша мин туған халҡымдың тарихын, йолаларын, мәҙәниәтен һәм тәжрибәһен өйрәнәм. Кеше күңеленең матурлығын һәм аҡыллығын табам, нескәлеген тоя беләм.

Әммә, кыҙғаныска ҡаршы, үҙенең туған телендә бөтә кешеләр ҙә һөйләшә алмай. Сит ерҙәргә китеп, туған телдәрен онотоп йөрөгән кешеләр ҙә бар. Улар араһында әсә теленә ҡарата битарафтары ла аҙ түгел. Шуныһы бик күңелде ҡыра.

Минең туған телем – башҡорт теле. Мин башҡорт булыуыма бик шатмын. Бала саҡтан уҡ мин башҡортса һөйләшәм. Башҡорт телендә бик күп әҫәрҙәр уҡыйым, йырлайым. Сөнки туған телем – бик моңло тел. Шуға ла мин үҙемде туған әсә телдәрен белмәгән кешеләр алдында бәхетле, ғорур тоям.

***Нигмәтуллина Кәмилә, 8-се класс***

Мин - башҡорт ҡыҙы, исемем-Әлиә.Телем туған башҡорт телендә асылған. Һәр иртә һайын әсәйем мине яратып, арҡамдан һөйөп “Тор, ҡыҙым,тор инде, матурым!”- тип уята. Яратам да инде шул минуттарҙы. Беҙ өйҙә башҡорт телендә аралашабыҙ.

Быйыл көҙгөһөн минең тормошом ҡырҡа үҙгәрҙе. Миңә урыҫ мәктәбенән, “48-се башҡорт лицейы”на уҡырға күсергә тура килде.

Беренсе көндө лицейбыҙға килгәс тә мин нисектер тыуған өйөмә ҡайтҡан һымаҡ, үҙемдең туғандарым араһында йөрөгән кеүек, тойғолар кисерҙем. Бында мин үҙебеҙҙең башҡорттар араһында! Рәхәтләнеп башҡортса аралашам! Төрлө ҡыҙыҡлы түңәрәктәргә йөрөйөм . Хәҙерге ваҡытта мәктәп хорында йырлайым. Күрһәгеҙ ине әсәйем менән атайымдың ҡыуанғанын! Көн һайын тиерлек мине йырлаталар. Мин уларға үҙемә оҡшаған «Миләш», «Ҡаҙ ҡанаты» йырҙарын башҡарам. Өләсәйем дә минән ҡалышмай, икәүләп тә йырлап алабыҙ.

Минең уйлауымса, ата-әсәйем мине башҡорт лицейына күсереп бик дөрөҫ эшләнеләр. Бының өсөн уларға рәхмәтем сикһеҙ. Сөнки бында мин үҙ туған телемдә уҡыйым, дуҫтарым менән аралашам. Бергәләп төрлө уйындар уйнайбыҙ, ҡыҙыҡлы саралар үткәрәбеҙ, мәҙәниәтебеҙҙе, тарихыбыҙҙы, йолаларыбыҙҙы өйрәнәбеҙ. Һәр кешегә туған теле әсәр һыу, һулар һауа кеүек кәрәк икән ул. Тик быны балалар ғына түгел, хатта оло йәштәге кешеләр ҙә һуң аңлайҙар. Ә мин әле 5-се класта ғына уҡыуыма ҡарамаҫтан, туған телем менән нык ғорурланам!

***Нәфикова Әлиә, 5-се класс***

# 2019 – һары суска йылы

### Ҡуҙы

Юғары үрҙәргә һәм оло уңыштарға өлгәшеү йылы. Әлбиттә, бының өсөн үҙегеҙҙе йәлләмәй, тир түгергә тура киләсәк.

### Буға

Буғалар маҡсаттарына ирешер өсөн бөтәһен дә эшләргә әҙер.. Арағыҙҙа йылы, ышаныслы мөхит булдырғанда, алда торған мәсьәләләргә ижади ҡарағанда, эштәрегеҙ ыңғай, көйлө барыр.

### Игеҙәктәр

Игеҙәктәр ни теләгәнен генә түгел, бының өсөн ни эшләргә кәрәклеген дә аныҡ күҙаллай һәм көсөн йәлләмәй. Тырышлығы бушҡа китмәгәнен дә белә.

### Ҡыҫала

Ҡыҫалалар тыумыштан бирелгән һиҙемләү көсө ҡатмарлы боролоштарҙы, тәрән дарьяларҙы һис юғалтыуһыҙ үтергә ярҙам итә.

### Арыҫлан

Дипломатия һәм аралаша белеү оҫталығы ярҙамында оло ҡаҙаныштарға ирешер. Тыныслығы, тотанаҡлылығы, керһеҙ күңеле менән тирә-яҡтағы көсөргәнеште алып ташларлыҡ көскә эйә улар

### Ҡыҙ

Тормошто алдан әҙерләнгән “һыҙма” буйынса ғына алып барыу мөмкин түгел. Үтә ваҡсыллыҡ, артыҡ аныҡлыҡты кәметергә тура килер.

### Үлсәү

Яңы асыштар, еңеүҙәр, ҙур ҡаҙаныштар йылы. Яңы йыл биргән мөмкинлектәрҙән файҙаланып ҡалығыҙ, ҡыйыу һәм ышаныслы рәүештә алға атлағыҙ.

### Саян

Булмышы менән ышаныслы, төплө саяндарға киләһе йыл шул тиклем ҙур мөмкинлектәр аса, башы ғына әйләнмәһен! Алда торған мәсьәләләр араһынан мөһимдәрен асыҡлау ҙа тәүәккәллек талап итә.

### Уҡсы

Ҙур маҡсаттарға ирешәм, тиһәгеҙ, егәрлерәк булырға тырышығыҙ.

### Ылаҡ

Хеҙмәт һөйөүсәнлеге һәм һәр эште еренә еткереп башҡара белеү һәләте ылаҡтарға һәр хәлдә лә тотороҡло, тыныс булып ҡалырға ярҙам итер. Берҙәмлектә – көс.

### Һыуғояр

Көсөгөҙҙө ваҡ-төйәккә тәләфләмәгеҙ, һеҙҙе оло эштәр көтә Һөнәри оҫталыҡты арттырыу, яңы белемдәргә эйә булыу айырыуса хуплана.

### Балыҡ

Әммә балыҡтар матди байлыҡҡа ҡарағанда рухи көрлөктө өҫтөн күрә. Тормоштағы уңайлыҡтар хис-тойғоларына ыңғай йоғонто яһаһа, балыҡ үҙен бәхетле итеп тойор. Үҙгәрештәр көтөлә.

Баш мөхәррир: Ильясова Г.М. Компьютер версткаһы: Стрижова И.М.
Мөхәрриәт: 5-11 класс уҡыусылары